## Донъяла

**ҮҘЕНСӘЛЕКЛЕ, ГҮЗӘЛ МӘҘӘНИӘТ БАШҠАЛАҺЫ.** Мөхәм-мәд пәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) ҡалаһы Мәҙинә 2013 йылда ислам донъяһының башҡалаһы тип һайланды, тип хәбәр итә Arab News.

Мәҙинәнең хакимы Абдул Ғәзиз бин Мәжид солтан был яҡшы яңылыҡ уңайынан хакимиәттә бик күп саралар планлаштырылыуын әйтә, улар йыл буйы барасаҡ.

Мосолман мәркәзе тигән исемгә төрлө йылдарҙа Рабат, Исфахан, Дакар, Фәс, Александрия һ.б. ҡалалар лайыҡ булғайны. Мәккә 2003 йылда Ислам мәҙәни үҙәге башҡалаһы булып торҙо. Әле Мәҙинәлә Пәйғәмбәрҙең мәсетен матурлап тәҙәү проектын тормошҡа ашырыу дауам итә. Абдул Ғәзиз Мәжид ҡала халҡын матур сараларҙы уҙғарыуҙа ярҙам итешергә саҡырҙы.

* * *

**ҠАҺИРӘ.** Onlslam.net тикшереүе буйынса, доктор Әл-Ҡарадауи икенсе тапҡыр "йыл ғалимы" тип танылды. Яуап биреүселәрҙең 39,9 проценты доктор Әл-Ҡарадауи өсөн тауыш бирҙе. Икенсе һәм өсөнсө урындарҙы Ноғман Али Хан һәм шәйех Ясир Ҡазый алды. Мосолман ғалимдарының Халыҡ-ара берлеге Президенты доктор Йософ Әл-Ҡарадауиҙың икенсе йыл рәттән ошо исемгә лайыҡ булыуын әйтергә кәрәк.

Әлеге Ислам сайты Ислам ҡиммәттәрен һәм ғилемен таратыуҙа, шулай уҡ мосолман йәштәрен берләштереүҙә ҙур өлөш индергән Ислам ғалимдары һәм әһелдәренең хеҙмәтенә лайыҡлы баһа биреү өсөн бындай сараны йыл да уҙғара.

**СОМӘЛИН ӘСКЕ ЭШТӘР МИНИСТРЛЫҒЫН ҠАТЫН-ҠЫҘ ЕТӘКЛӘЙ.** Үҙенең Әске эштәр министрлығы министры итеп тәғәйенләнеүен Фәүзиә Йософ, Хажи Аден "Сомали ҡатын-ҡыҙҙарының еңеүе", тип атаны. Сентябрҙә инаугурация үткән Сомали президенты Хәсән Шәйех Мохәмүд яңы Хөкүмәтте етәкләүселәрҙе иғлан иткәндә, уның үҙ-ара кәрәш алып барған төркөмдәрҙең тигеҙлеген тәьмин итерлек составта төҙәлгәнен әйтте. Шулай уҡ премьер-министр Абди Фарах Ширдон Сәйед: "Беҙ йәмғиәттәге төрлө ҡатламдың һәм көстәрҙең ихтыяжын, талабын иҫәпкә алырға тырышабыҙ", тине.

Уның әйтеүенсә, бөтөн кландарҙың да вәкилдәрен дә кабинетҡа индереп булмай, шуға ҡарамаҫтан улар үҙҙәрен ситләтелгән тип тойорға тейеш түгелдәр, сөнки хөкүмәттең алдында Сомалиҙы тотошлайы менән ҡотҡарыу бурысы тора.

# КИТӘБУТ-ТӘРБИӘ

## (Тәрбиә китабы)

**Ҡәйүм НАСЫРИ**

### Беренсе тәрбиә

Бер хаким балаларға шулай нәсихәт бирҙе: "Эй йәндәрем, улдарым, нәсихәтте ишетегеҙ - һөнәр өйрәнегеҙ. Донъяның милкенә үә дәүләтенә ышанырға ярамаҫ. Алтын-көмөш сәфәр кешеһенә хәтәрҙер; үә йорт-ер кешеһенә даһи хәтәр бар: йә уғры алып китер, йәки утҡа янып китер. Әммә һөнәр - бер ағым һыуҙыр, үә ышаныслы дәүләт-тер. Һөнәр эйәһе әгәр дәүләттән төшһә лә, ҡайғы юҡ. Инде, эй улым, был урында максуд бер хикәйәт түгелдер. Һин дә шулай уҡ һөнәр өйрән, тәрбиә өйрән, ғилем өйрән".

### Икенсе тәрбиә

Аҡһаҡалдарҙың береһенә бер әҙәм хәбәр ҡылды: "Фәлән кеше, минең боҙоҡ эштәремде һөйләп, фәлән ерҙә мине яманлаған", - тине. Ул аҡһаҡал әйтте: "Һин уның яҡшы эштәрен һөйләп, уны оятлы ит", - тине. Был даһи һиңә бер тәрбиәләр. Эй улым, һәр бер хикәйәттән бер мәғәнә. Фәһем итһәң, аңлыҙҙан берәү һине бер ерҙә яманлаған булһа, уға ҡаршы һин уны маҡта. Шаят ул үҙе лә, әҙәм булһа, инсаф итер үә оялыр.

### Өсөнсө тәрбиә

Бер падишаһтың бер нисә улы булып, араларынан береһе - зәғиф, ҡыҫҡа буйлы, кес кенә ине. Башҡалары оҙон буйлы, матур йөҙлө инеләр, әммә аталары ул улына нәфрәт үә кәмһетеү менән ҡарар ине. Ул улы бер зиһен эйәһе үә мәғрифәтле бала ине. Әйтте: "Эй атай, аҡыллы тәпәш наҙан оҙондан яҡшыраҡ түгелме? Һәр нәмәнең ҡиммәтле күлдәгенә ҡарап йөрөмәйҙер. Мунса ташы бик эре, йөгә бер тәңкә, ынйы бик ваҡ, мыҫҡалы ун тәңкә", - тине. Аталары үә дәүләттең ҙур кешеләре барыһы күңелдәлер үә тәхсин ҡылыштылар... Бәй, эй улым, ғилем үә мәғрифәт тигән нәмә буйға үә ҡиәфәткә ҡарап булмайҙыр.

### Бишенсе тәрбиә

Лоҡман хакимдан һоранылар: "Һин хикмәтте кемдән өйрәндең?" - тинеләр. Әйтте: "Күҙһеҙ кешеләрҙән өйрәндем, сөнки улар аяҡ баҫаһы урынды күрмәйенсә аяҡ баҫалар", - тине... Эй, улым, бында һиңә тәрбиә шулдыр, Лоҡман хакимдың һуҙен яҡшы фәһем итеп ҡара, йәғни ул: "Күҙһеҙҙәр, аяҡ баҫаһы урынды күрмәйенсә, йә абыналар, йәки төртөләләр, йәки йығылалар, шулай уҡ аңы юҡ кешеләр үә наҙандар һүҙҙең урынын белмәй һөйләшәләр, үә ахырын уйлап һөйләшмәйҙәр. Уларҙың наҙанлыҡтарын күрҙем дә хаким булдым", - тине.

### Алтынсы тәрбиә

Ололарҙан бер әҙәм үҙенең улын бер ғалим остазға тәғлим үә тәрбиә өсөн тапшырҙы. Үә әйтте: "Эй остазы-камил, ошо баланы тәрбиә ҡыл үә уҡыт, ғалим үә аҡыл эйәһе булһын", - тине. Бер аҙ ваҡыт был баланы остаз тәрбиә ҡылды үә уҡытты. Әммә һис бер ғилем әҫәре ҡылманы. Ул баланы атаһына ҡайтарып ебәрҙе. Әйтте: "Был бала, һис бер белемгә һәләтле түгелдер, хатта үҙемде диуана ҡылды", - тине...

### Етенсе тәрбиә

Бер падишаһ диңгеҙҙә бер кәмәлә сәфәр ҡылғанда күрҙе: бер егет бар, аслан (асылда), быҒаса кәмәгә ултырғаны юҡ, имеш. Үә кәмәнең мәшәҡәтен күргәне юҡ, имеш. Ҡурҡып илап ултырыр, дер-дер ҡалтырар. Ни ҡәҙәр йыуатып ҡаранылар, илауҙан һис туҡтамай. Падишаһ даһи хафа булды (хафаланды). Унда бер хаким бар ине, әйтте: "Эй әфәнделәр, әгәр бойорһағыҙ, мин бер хәйлә ҡылайым: шаят сабыр итер", - тине. Падишаһ әйтте: "Белгәнеңде эшлә", - тине. Бәс, хаким әмер итте. Был егетте бәйләп дарьяға (диңгеҙгә) аттылар, бер ике мәртәбә сумдырып, йәнә кәмәгә алдылар. Был егет үлемдән терелеп ҡайтҡан кеүек хайран булып, бер ҙә өндәшмәйсә ултырҙы, күңеле ҡарар тапты. Падишаһ быны бик тәхсин ҡылып, хакимға әйтте: "Йә хаким, бында ни хикмәт барҙыр?" Хаким әйтте: "Ул егет әүүәл кәмәнең мәшә-ҡәтен үә һыу сәфәрен күргәне юҡ, йәнә һыуға батыуҙы белгәне юҡ, үә кәмәлә сәләмәт йөреүҙең ҡәҙерен белгәне юҡ, имеш", - тине. Бында һиңә тәрбиә шулдыр, эй улым, шулай уҡ әҙәм ғафиәттең үә сәләмәтлектең ҡәҙерен бер михнәткә дусар булғас беләләр.

### Һигеҙенсе тәрбиә

Бер падишаһ улының атаһынан ҡалған күп хазинаһы бар ине. Киң күңеллелек үә йомартлыҡ ҡулын асты, үә үҙенең ғәскәр халҡына үә үҙ дәүләте кешеләренә ниһайәтһеҙ хазиналар түкте. Бер ваҡытты бер ахырын уйламаусы кәңәшсеһе нәсихәт әйтте: "Эй шаһзадә, элекке падишаһтар был хазинаны ижтиһад менән хасил иткәндәрҙер (булдырғандар), үә бер мәслихәт өсөн әҙерләгәндәр. Һин аҙыраҡ ҡыҫыбыраҡ тот, ваҡыты килер", - тине. Шаһзадә уның мәслихәтен мәғҡул күрмәне... "Ни була, ашармын, эсермен, бирермен, мин ул хазинаға ҡарауылсы булғаным юҡ", - тине. Эй улым, урынһыҙ һаранлыҡ ҡылырға ярамай.

### Туғыҙынсы тәрбиә

Ике туған бар ине. Береһе падишаһ хеҙмәтендә булып ғүмер кисерер ине. Береһе үҙенең ҡул көсө менән табыш итеп тереклек ҡылыр ине. Бер ваҡыт падишаһ хеҙмәтендәге бай туғаны әйтте: "Эй туғаным, ниңә падишаһ хеҙмәтенә кермәйһеҙ, Ҡаты хеҙмәттәрҙән ҡотолор инең", - тине. Ул туғаны әйтте: "Һин ниңә ҡул көсөң менән тереклек ҡылмайһың? Хеҙмәт хурлығынан үә кәмһетелеүҙән котолор инең. Хакимдар әйткәндәр ти, үҙ икмәгеңде ашап өйеңдә ултырыуың, кеше хеҙмәтендә алтын кәмәр бағлауынан (кейем кейеүҙән) артығыраҡтыр...". Үҙ көсөң менән тапҡан бер тинең кеше көсө менән хасил булған мең тиндән бәрәкәтлерәктер.

### Унынсы тәрбиә

Нуширван падишаһ һарайында бер гөруһ (төркөм) хакимдар бер мәслихәт хосусында һөйләшеп ултыралар ине. Ул мәжлестә Бөзәржөмһөр бар ине. Әммә ул һис һүҙ өндәшмәйсә сөкүт (шым) ҡылып ултырыр ине. Әйттеләр: "Йә, Бөзәржөмһөр, һин был хосуста беҙҙең һүҙебеҙгә бер ҙә ҡатнашмайһың", - тинеләр. Бөзәржөмһөр әйтте: "Вәзирҙәр - табибтарҙыр: ауырыу түгел кешегә дарыу бирмәйҙәр. Мин күрәм, һеҙҙең фекерегеҙ раҫтыр, был тәкдиргә минең ҡатнашыуымдың хикмәте бер ҙә юҡтыр", - тине. Эй улым, Бөзәржөмһөрҙән һиңә тәрбиә шулдыр, хакимдар булып та урынһыҙ ерҙә кеше һүҙенә ҡатнашмаһылар. Кешенең һүҙенә торған һүҙен киҫеп һүҙ әйтмәк - насар холоҡтыр. Әгәр кеше һүҙенә ҡатнашмаҡсы булһаң, мәжлестәштәрең туҡтаған арала һүҙгә ҡатнаш.

### Ун беренсе тәрбиә

Искәндәр Румиҙан һоранылар: "Мәшриҡ үә мәғриб илдәрен нисек итеп алдың? Әлеке падишаһтар ни ҡәҙәр ғәскәр үә аҡса, үә хазина түгеп тә ала алмағандар ине", - тинеләр. Искәндәр әйтте: "һәр мәмләкәтте алдым, халҡын рәнйетмәнем. Үә элгәре падишаһтарҙы изгелектән ғәйре нәмә менән зикер ҡылманым", - тине. Эй улым, инде күрҙең, ниндәй тәрбиәле кешеләр бар, имеш. Хилем үә йомшаҡлыҡ менән бөтә мәмләкәтте яулап алалар; хилем үә йомшаҡ һүҙле булырға тейеш: гәрсә дошманың булһа ла, изгелектән ғәйре зикер ҡылмағанһың.

### Ун икенсе тәрбиә

Олуғтарҙан берәү бер падишаһтан һораны: "Фәлән дәрүиш хаҡында ни әйтәһең? Бәғзеләр уны хурлайҙар", - тине. Ул падишаһ әйтте: "Мин тышҡы яҡтан ҡарағанда ғәйеп күрмәйем, әммә эсе үә көңеле - билгеһеҙҙер. Шуға хөкөм итә алмайым", - тине. Эй улым, фәҡәт үҙеңдең шигең менән генә: "Был кеше фәләндер", - тип, кеше өҫтөнә ғәйеп иҫбат итмәк хаталыр. Быны яуызлыҡ тиерҙәр, харам эштер. бынан һаҡлан.

### Ун өсөнсө тәрбиә

Шәйех Сәғди әйткән икән: "Хажда Ғәбделҡадир Жиләниҙы күрҙем. Ҡәғбәгә башын ҡуйып яткан: "Эй хоҙайым, ғәфү ҡыл! Әгәр ғәфү итмәһәң, ҡиәмәттә күҙһеҙ итеп ҡеберемдән ҡубар: изге кешеләр араһында оятҡа ҡалғанымды күрмәһәм ине!" - тип ҡабатлай икән. Эй улым, донъяла бер кес кенә ғәйебеңде лә кешеләр күҙенә күрһәтергә ояланһың. Ҡиәмәттә, пәйғәмбәрҙәр, изгеләр һәм бөтә донъя халҡы күҙ алдында ғәйептәреңде һәм гонаһтарыңды йөҙеңә бәрһәләр, унда бит ҡасырға урын булмаясаҡ. Инде һиңә тәрбиә булыр: әхирәттә йөҙеңә сығырлыҡ ғәйепте эшләмә. Ғәбделҡадир Жиләни кеүек изге кешеләр шул ҡәҙәр ҡурҡһа, һиңә, миңә - ни ҡала?! Иманлы булыу фарыҙдыр.

### Ун дүртенсе тәрбиә

Изгеләрҙән бер әҙәм бер падишаһты төшөндә күрҙе-ожмахта ултыра; үә даһи бер фәҡир суфыйҙы күрҙе-йәһәннәмдә ғазапта, имеш. Һораны: "Был падишаһ был дәрәжәне ни менән тапты ла, был фәҡир суфый был түбәнлеккә ни сәбәпле төштө? Беҙ быны хилафын уйлай инек", - тине. Әйттеләр: "Падишаһ - фәҡирҙәрҙе үә дәрүиштәрҙе сөйгән (һөйгән) өсөн ожмахлы булды. Әммә был фәҡир - падишаһтарға яҡынлығы сәбәпле йәһәннәмле булды", - тинеләр.

### Ун бишенсе тәрбиә

Юнан вилайәтендә бер караунды талап, хисапһыҙ малдарҙы алып киттеләр. Сәүҙәгәрҙәр бик илаштылар, Аллаһ Тәғәләнән ярҙам теләнеләр. Ни файҙа. Ул карауан эсендә Лоҡман хаким бар ине. Берәү әйтте: "Йә хаким, ул бурҙарға бер нисә хикмәт кәлимәләре әйтсә, малдарыбыҙҙы ҡайтарып бирһендәр", - тинеләр. Лоҡман әйтте: "Уларға хикмәттең тәьсире теймәҫ". Йәғни ҡара күңелгә хикмәт үә нәғәз әҫәр итеп, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағып булмайҙыр, тине...

### Ун алтынсы тәрбиә

Лоҡман хакимдан һоранылар: "Һин әҙәпте кемдән өйрәндең?" - тинеләр. Лоҡман әйтте: "Әҙәпһеҙҙәрҙең әҙәпһеҙлеген күреп, үҙемә килешмәгән кеүек булды ла, һаман ундай фиғелдәрҙән һаҡлана килдем, әҙәпле булдым", - тине. Эй, улым, аҡыллы балаға атлаған һайын ғибрәттәр бар, үәғәздәр бар; мәғрифәт хасил итә күр.

### Ун етенсе тәрбиә

Хикәйәт ҡылынған, бер дәрүиш кисендә бик күп тағам ашап, сәхәргә ҡәҙәр бер туҡтауһыҙ намаҙ уҡый, имеш. Быны бер аҡыл эйәһе ишетеп әйтте: "Әгәр, бисара, ярты ҡаҙаҡ икмәк ашап ятып йоҡлаһа, күп артыҡ булыр ине. "Эй улым, ҡорһаҡты күп тултырмаҡ файҙаға түгелдер".

### Ун һигеҙенсе тәрбиә

Шәйех Сәғди һөйләгән икән: бер сәфәрем ваҡытында,ялда, төн урталарында уянып китһәм, ни күҙем менән күрәйем: бер юлдашыбыҙ, бер ситтәрәк, йырлап-илап, шиғырҙар әйтеп, күҙен дә йоммаҫтан төндә уҙғарҙы. "Был ни хәл тағы?!" - тип һораным. Әйтте: "Былбылдарҙы күрҙем: ҡыуаҡтан ҡыуаҡҡа осоп, аһзар ҡылалар. Кәйектәр тауҙарҙан әрнеүле ауаздар һалалар. Баҡалар - һыуҙа баҡылдайҙар. Төрлө януарҙарҙың шау-шыуынан урмандар гөрләп тора. Шундай фекергә килдем: барлыҡ йән эйәләре, кейектәр, ҡоштар, йоҡламаҫтан зикер-тәсбих әйткән бер ваҡытта, минең иҙрәп йоклап ятыуым аңҡаулыҡ (аңралыҡ) булмаҫмы?" - тине.

### Ун туғыҙынсы тәрбиә

Бик оҙаҡ замандар бер урманда үлән үә япраҡ менән тәрбиәләнеп тереклек ҡылыусы бер дәрүиш бар ине. Бер падишаһ ул дәрүишкә хәлен белергә барҙы. Әйтте: "Йә шәйех, әгәр мәслихәт күрһәң, ҡалала тор, һинең өсөн урын әҙерләнем, тыныс үә рәхәт ғибәҙәт ҡылып ятыр инең. Даһи ҙә һинең бәрәкәтле нәфсең менән файҙаланыр инек. Үә һәм һинең изге ғәмәлдәреңә беҙ ҙә эйәрер инек", - тине. Дәрүиш ҡабул итмәне. Дәүләттең ҙур кешеләре падишаһҡа әйттеләр: "Мәслихәт шулдыр, бер нисә көнгә ул дәрүиште ҡалаға килтереп, бер аҙ ҡунаҡ итеп ҡарайыҡ, кәйефенә хуш килеп бәлки торорға ла риза булыр", - тинеләр. Бәй, тегә дәрүиште ҡалаға саҡырып килтерҙеләр, бер һарайҙа үҙенә хас бер урын әҙерләнеләр. Унда шундай гүзәл үә хозур, әгәр мәйет кергә лә хәйәт табыр (терелер). Падишаһ ул дәрүиштең хеҙмәтенә бер сибәр йөҙлө кәнизәк ебәрҙе, йәнә гүзәл сифат бер егет ебәрҙе. Унан һуң ул дәрүиш ләззәтле ризыҡтарҙы татып ҡарай башланы. Латиф үә йомшаҡ кейемдәрҙе кейә башланы. Үә татлы әсемлектәр менән, үә хуш еҫле емештәр менән тәрбиәләнә башланы. Үә кәнизәктең гүзәллегенә тамаша ҡылып күҙ һала башланы. Бер ваҡыт падишаһ ул дәрүиште күрергә ҡарар ҡылды. Килеп күрҙе, дәрүишебеҙ элгәре сифаттарҙан сыҡҡан; ҡулдары ағарған, йөҙҙәре ҡыҙарған, үҙе үә нәфсеһе һимергән - ефәк мендәрҙәргә таянған, тауистай (павлин) бер егет баш осонда елпәзә тотҡан. Падишаһ хайран булды. Әйтте: "Был ике таифәне, йәғни ғалимдарҙы үә дәрүиштәрҙе мин дуҫ тота инем", - тине. Бер вәзир әйтте: "Эй падишаһым, ғалимдарға алтын бер ғәйреләр ғалим булырға теләһендәр. Дәрүиштәргә шундай нәмә бир, урындарында дәрүиш булып ҡалһындар", - тине. Йәғни ләззәтле донъянан улар йүнәлеш алмаһындар тимәкетер.

(Дауамы бар).
"Дәғүәт" нәшриәте.